*Ишмөхәмәт ШАРАПОВ*

# Аймаҡ атамаларында халыҡ тарихы

Ғалимдар билдәләүенсә, *аймаҡ* һүҙе монгол теленән үҙләштерелгән. 1958 йылда баҫылып сыҡҡан башҡорт-урыҫ һүҙлегендә *аймаҡ* һүҙенә түбәндәге аңлатма бирелә: «Род или родовое подразделение в северо-восточной Башкирии. Позднее, после разложения кровнородственных связей – территориальное объединение нескольких семей на базе коллективного пользования общими пастбищами». Ҡайһы бер һөйләштәрҙә *аймаҡ* урынына *ара* һүҙе ҡулланыла. Алда иҫкә алынған һүҙлектә *ара* һүҙенә түбәндәге аңлатма бирелә: «Низшее сословие родового подразделения башкир». Был һуңғы аңлатма *ара* һәм *аймаҡ* һүҙҙәренең мәғәнәләрен теүәл бирә кеүек. Ҡайһы бер һөйләштәрҙә *әкрәбә* һүҙе лә йөрөй. Әммә ул диалект һүҙҙәр иҫәбенә керә, халыҡта киң таралыу тапмаған.

1993 йылда сыҡҡан башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә аймаҡ һүҙе ошолай билдәләнә: ырыу эсенә ингән бәләкәйерәк туғандаш төркөм. Ара һүҙе лә шулай уҡ аңлатыла. Ғаиләлә башлыса бер туғандар йәшәй. Аймаҡта иһә, төрлө ғаиләләрҙә йәшәһәләр ҙә, ҡәрҙәшлек буйынса берегәләр. Улар ете, хатта унан да күберәк быуындар ҡәрҙәшлеге буйынса ойошалар. Бер ғаилә ҡороу аймаҡ эсендә тыйыла. Егет икенсе аймаҡтан кәләш алырға, ҡыҙ икенсе аймаҡҡа кейәүгә барырға тейеш.

Башҡорттарҙа һәр аймаҡтың үҙ атамаһы бар. Тимәк, ырыуҙың үҙ ҡошо, ағасы, ораны, тамғыһы булған кеүек, ырыу эсендәге аймаҡтар бер-береһенән аймаҡ атамаһы менән айырыла. Ырыуҙа аймаҡтар һаны бер нисә булырға мөмкин. Ҡәрҙәшлектең киңерәк билдәһе – ырыу, ҡәбилә булһа, бөтә башҡорттар бер милләтте – башҡорт милләтен тәшкил итәләр. Халыҡтар тормошонда милләттәшлек тә оло мәғәнәгә эйә.

Мин Тиләү һәм Күбәләк ырыуҙары тарихын өйрәнәм. Уларҙа аймаҡтарға ҙур әһәмиәт бирелә. Аймаҡ атамаларында халыҡ тарихы сағыла.

Бөгөнгө көндә Күбәләк һәм Тиләү ырыуҙары халҡы ҡырҡлаған ауылда көн итә. Һәр ауылда өстән алып унға тиклем аймаҡ бар. Ҙурыраҡ ауылдарҙа хатта күберәк тә. Һәр аймаҡ атамаһы ырыу тормошоноң билдәле бер осоро менән бәйле. Ҡайһы бер осраҡта аймаҡ исеме ырыуҙаштарының, ауылдаштарының көлөп, мәрәкәләп, кәмһетеп атауҙары һөҙөмтәһендә лә барлыҡҡа килгән һәм нығынып ҡалған. Мәҫәлән, «маңҡа», «ҡортто», «һармаҡ», «таҙ», «һейгәк» һәм башҡалар. Дөрөҫ, был аймаҡ кешеләре үҙҙәрен икенсе төрлө йөрөтә. Әммә халыҡ араһында тәүгеләре нығынған. Улар үҙҙәренсә көлөү, кәмһетеү, үсектереү сараһы ла булып тора.

Байтаҡ ҡына аймаҡ атамалары йәнлек, ҡош-ҡорт исемдәре менән бәйле: «ҡарағош», «тәкә», «йылан», «үгеҙ», «ҡыҙылбаш», «ҡуян», «һайыҫҡан», «бүре», «бесәй», «көҙән», «торна», «тумыртҡа» һәм башҡалар. Былар халыҡ тормошоноң мәжүсилек осоро һөҙөмтәһендә ҡушылған булырға тейеш. Һәр ырыу теге йәки был йән эйәһенә табынған. Әммә быларҙың да ҡайһы берҙәре көлөү, мәрәкәләү, кәмһетеүҙе белдерә. Мәҫәлән, ауыҙында һүҙ тормаған кешене һәм аймаҡ халҡын «һайыҫҡан» тип йөрөткәндәр. «Йылан» атамаһы уҫал, аҫтыртын кешеләре булған аймаҡтарға бирелгән. «Үгеҙ» атамаһы эшкә ялҡау, яй кешеле аймаҡтарға ҡушылған. Шулай ҙа был аймаҡтың тарихы Урта Азиялағы боронғо Оғуз ҡәбиләләренә барып тоташа. Бөгөн атаманың ошо мәғәнәһе, килеп сығышы онотолоп, көлкө, мәрәкә һүҙенә әүерелгән. «Ҡарағош», «торна», «тумыртҡа» һәм башҡа атамалар ырыуҙарҙың ҡошо исемдәренән ҡалған булһа кәрәк. Халыҡтар теге йәки был ырыуға килеп ҡушылғанда үҙҙәренең ҡошо атамаларын аймаҡ исемендә һаҡлап ҡалған булырға тейеш. Ә «бүре» исеме башҡорт халҡы тарихында ныҡлы эҙ ҡалдырған һүҙ.

Күп кенә аймаҡ атамалары милләт исемдәрен дә белдерә. Мәҫәлән, «ҡаҙаҡ»,

«ҡалмыҡ», «сыуаш», «татар», «һарт» һәм башҡалар. Билдәле, уларҙың һәр береһенең үҙ тарихы бар. Мәҫәлән, ауылға йәки ырыуға бер нисә сит милләт кешеһе килеп һырыға. Йылдар үткәс, улар үҙҙәренең милли йөҙөн юғалта, бөтөнләй башҡортлашып китә. Әммә аймаҡ атамаһында был кешеләрҙең ҡайһы милләттән килеп ҡушылғаны онотолмай, һаҡлана, үҙен иҫкә төшөрөп тора. «Һарт» тигән ауылдар, аймаҡтар Башҡортостанда йыш осрай. Ғалимдар, элек үзбәк халҡын «һарт» тип йөрөткәндәр, тип аңлата. Бынан мең ярым, ике мең йылдар элек тә Алтайҙа Телеут ҡәбиләһендә (Тиләү) «сарт» аймағы булған. Алтайҙа *аймаҡ* урынына *сөйәк* һүҙе ҡулланылған. Әммә мәғәнәһе аймаҡҡа тура килә. Ҡытай баҫҡынсылары һөжүменән ҡасып, ҡайһы бер тиләү ҡәбиләһе төркөмдәре Урта Азияға килә. Аҙаҡтан улар үзбәктәргә, ҡарағалпаҡтарға, ҡаҙаҡтарға, башҡорттарға бүленеп, ҡушылып китәләр. Үзбәктәргә ҡушылған һарт аймағы кешеләре һуңынан Башҡортостандағы ырыуҙаштарына килеп ҡушылманымы икән? Ғөмүмән, был хаҡта ныҡлап тикшереноһе, «һарт» һүҙенең килеп сығышын асыҡлайһы бар әле.

Учалы районы Ташҡыя һәм Мәҫкәү ауылдарында «зөйә» тигән аймаҡтар бар. Тәү ҡарамаҡҡа сәйер һүҙ. Әммә Тиләү ырыуының Уралға килгәнсе Зөйә йылғаһы буйында йәшәүен иҫкә төшөрһәк, аңлашыла кеүек. Тиләүҙәр Уралға күсенгәндә Зөйә буйында йәшәгән бер нисә ғаилә ҡушылырға мөмкин. Бәлки улар башҡа ырыу, милләт кешеләре лә булғандыр. Тиләүҙәр уларҙы үҙ ырыу аймаҡтары менән бутамаҫ өсөн «зөйә» тип йөрөтөүе мөмкин.

Науырҙа ауылында «һары» аймағы бар. Был атама тәүге ҡарамаҡҡа төҫкә, йөҙгә ҡарап бирелгән кеүек. Әммә Алтайҙа боронғо осорҙа ла «һары» аймағы булған. Ҡыпсаҡтарҙың да элек һарылар тип йөрөтөлөүен иҫкә төшөрһәк, мәсьәлә тағы ла асыҡлана төшә. Тимәк, ҡасан да булһа, ҡыпсаҡтарҙан йә булмаһа Алтайҙағы һары аймағынан бер кеше, ғаилә, ике-өс ғаилә Тиләү ырыуына килеп ҡушылған. Улар күптән башҡортлашҡан. Әммә һары аймағы атамаһы һаҡланып ҡалған.

Шул уҡ ауылда һәнәк аймағы бар. Улар холоҡ-фиғеле менән башҡаларҙан айырылып тора. Ә ни өсөн «һәнәк» тип ҡушылған? Мин төрлө сығанаҡтарҙы ҡарап сыҡтым. Шунда Мең ырыуындағы һәнәк тамғаһына иғтибар иттем. Тимәк, Тиләү ырыуы Мең ырыуы менән күрше булып Күгиҙел (Дим) буйында йәшәгәндә бер нисә ғаилә уларға килеп ҡушылған. Улар ырыуҙа үҙ тамғалары һәнәк менән маҡтанғандыр. (Һәнәк аймағы кешеләре бер аҙ маҡтанырға ярата.) Шунда ырыуҙың төп халҡы уларға «һәнәк» атамаһын йәбештереп ҡуйған.

Әлеге Науырҙа ауылында тувал тигән аймаҡ бар. Бер ҙә башҡорт һүҙенә оҡшамаған кеүек. Алтай өлкәһенең төньяғында туфаллар тигән халыҡ бар. Был милләт кешеләре элек-электән ҡуйы урмандар араһында көн иткән, һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Хәҙер улар бер нисә йөҙ мең кешегә генә тороп ҡалған. Улар ҡайын туҙынан һауыт теккәндәр ҙә шунда арпанан эсемлек әсетеп әҙерләгәндәр. Был һауытты Алтайҙың төп ҡәбиләләре (тиләүҙәр) туфаллар тип йөрөткән. Аҙаҡ ошо һауыт исеме халыҡҡа йәбешкән. Башҡорттар һауытты туйыс, тыryз тип йөрөтә. Тиләүҙәр Урта Азияға күскәндә, моғайын, ошо туфалларҙан бер нисә ғаилә улар менән киткәндер. Билдәле, уларға әлеге халыҡ исеме йәбешкән. Хәҙер мең ярым, ике мең йыл самаһы туфаллар халҡының вәкилдәре башҡорттар араһында Тиләү ырыуында йәшәй, көн итә. Улар башта тиләү, аҙаҡтан башҡорт телдәрен үҙләштергән булып сыға. Әммә тәүге милләт исемен аймаҡ атамаһында һаҡлай. Бөгөнгө башҡорт телендә тувал һүҙе һаҡланмаған.

Белеүебеҙсә, ҡасандыр Ҡатай ырыуы ла Алтайҙа йәшәгән. Улар ҙа туфаллар менән аралашҡандыр тиергә кәрәк. Шәжәрәләр китабында Ҡатай ырыуы халҡында «тувал» һүҙе булыуын күрәбеҙ. Бында ла ул туҙҙан тегелгән һауытты аңлата. Тик ҡатайҙар унда инде эсемлек әҙерләмәгән, ә йәйге эҫе селләләрҙә тиҙәк йәки сөрөктәргә ут төртөп, төтәнәк итеп файҙаланған. Күрәһең, һауыттың ситтәренә утта янмаһын өсөн нимәлер һалғандарҙыр. Тиҙәк йәки серегән ағасҡа ут тоҡандырһаң, ул оҙаҡ ваҡыт ҡуйы төтөн сығара. Уны ел башына ҡуйһаң, малдар тыныс тора. Төтөн араһына серәкәй, күгәүендәр кермәй. Шуныһы ҡыҙыҡ: «тувал» һүҙе Тиләү ырыуында бары аймаҡ атамаһын белдерә, тәүге мәғәнәһе онотолған. Ә ҡатайҙарҙа ул тәүге мәғәнәһендә йөрөгән.

Был мәҡәләлә мин ни бары ике ырыу аймаҡтарын ғына байҡап сыҡтым. Әммә уларҙа ла халыҡ тарихына бәйле күпме мәғлүмәт һаҡланған. Башҡорт бер атаманы ла бушҡа ҡушмаған. Ә аймаҡ исемдәре үҙе бер тарих. Шул тарихҡа ентекләберәк иғтибар бирһәк ине.